*Әхмәтзәки* ***ВӘЛИДИ***

# Өфөбөҙҙән сыҡҡан бер ғалимдың хеҙмәтенә егерме биш йыл тулыу мөнәсәбәте менән

Ошо мәҡәләмдә мин үҙебеҙҙең берҙән-бер этнографыбыҙ булған полковник Әбүбәкер абзый Әхмәтйән улы Диваев хаҡында һөйләргә итәм. Сөнки Әбүбәкер әфәнде, беренсенән — Өфө кешеһе, Өфө мырҙаһы, икенсенән, быйыл уның фәнни хеҙмәтенә егерме биш йыл тулды. Әбүбәкер әфәнде беҙҙең төрк этнографияһына, йәғни беҙҙең милли ғилемебеҙгә ни ҡәҙәр күп һәм шул ҡәҙәр оҙон йылдар хеҙмәт иткән кеше булһа ла, беҙҙең халҡыбыҙ уны яҡшылап белмәй, сөнки беҙҙә, беренсенән, Әбүбәкер әфәнде өйрәнгән ғилем менән шөғөлләнгән кеше юҡ, икенсенән, Әбүбәкер әфәнденең бөтөн хеҙмәттәре рустарҙың үҙ араһында ла бик аҙ ғына нөсхәлә тарала торған фәнни журналдарҙа рус телендә яҙылған.

Әбүбәкер әфәнде был көндә алтмыш йәшлек бер зат булып, Ташкент ҡалаһында йәшәй. Асылында иһә Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙе Туҡай ауылының дворян башҡорттарынан. Ул етенсе быуында башҡорт тарихында бик мәшһүр булған старшина Сөләймән Диваевҡа тоташа (Әбүбәкер бин Әхмәтйән бин Шаһморат бин Фәрехшат бин Ишмөхәмәт бин Дауыт бин Сөләймән бин Дивай). Әбүбәкер әфәнденең нәҫел-нәсәбе бер рисәлә һүрәтендә бик яҡшы итеп яҙылған, хужаһы уны рәхим итеп миңә ҡулланырға бирҙе. Әбүбәкер әфәнденең төп бабаһы булған Дивай Навай улы кантондарынан элекке Стәрле өйәҙендә старшиналыҡ иткән һәм полковник дәрәжәһендә булып, 1729 йылда вафат булған. Уның улы Сөләймән тағы старшина булып торған һәм 1756 йылда фетнә сығарған башҡорттарға ҡаршы хеҙмәт иткән һәм фетнәнең башлығы булған Батырша мулланы тотоп алған. Ошоноң өсөн әбей батша Елизавета Петровна уны баш ҡалаға саҡырып алған. Сөләймән старшина унда күп хөрмәттәр күргән һәм 1757 йылда вафат иткән. Дивай менән Сөләймәндән һуң да был нәҫел һаман ғәскәри һәм хөкүмәт хеҙмәттәрендә булып килгән. Өфө виләйәтендә Пугачев, Юлай, Салауат фетнәләренә ҡаршы быларҙың күп хеҙмәттәре тейгән. Әбүбәкер әфәнденең атаһы Әхмәтйән дә армия кавалерияһында ротмистрлыҡ дәрәжәһендә булып, күберәк ваҡыт межевой корпуста хеҙмәт иткән.

Әбүбәкер әфәнде үҙе 1855 йылдың алтынсы декабрендә Туҡай ауылында тыуған. Һуңынан Ырымбурҙа Неплюев кадет корпусын тамамлап, 1906 йылда офицер булып сыға. Уҡыуын тамамлағандан һуң Төркөстанға ебәрелә, унда башта Әүлиә-ата өйәҙендә участковый начальник хеҙмәтендә тора. Һуңынан Төркөстан генерал-губернаторы канцелярияһында шәреҡ телдәре тәржеманлығы хеҙмәтен һәм военный губернатор янында чиновник особых поручений хеҙмәтен башҡара. Йыл ҡылаһы хеҙмәттәрен еренә еткереп, главный штаб ведомствоһының ғәскәри чиновниғы, коллежский советник исеме менән отставкаға сыға.

Әбүбәкер әфәнде үҙенең хеҙмәте дәүерендә ҙур эштәрҙә булған. Күп ваҡыт Бохара, Хиуа әмирҙәрен батша хәҙрәттәренә күрештереү, ике аралағы эштәрҙе ҡарау Әбүбәкер әфәндегә төшкән. Шул уҡ ваҡытта төрлө ғалимдар менән танышып, төрлө ғилми йәмғиәттәрҙә эшләргә лә өлгөргән. Ул үҙенең өҫтөнә төшкән хеҙмәттәрҙе яҡшы башҡарыуы бәрәбәренә бик күп миҙалдар алып, ғилми хеҙмәттәре өсөн төрлө йәмғиәттәргә ағза булып та һайланған. Ул бөгөн Һырдаръя статистика йәмғиәтендә, императорҙың шәрҡиәт йәмғиәтендә, императорҙың тәбиғәт һәм этнография йәмғиәтендә, императорҙың география йәмғиәтендә, Төркөстан тарих йәмғиәтендә хәҡиҡи ағза, Ҡазан дәрелфәнүненең тарих һәм археология йәмғиәтендә ғүмерлек ағза. Ул байтаҡ ваҡыт Төркөстан тарих йәмғиәтендә сәркәтиплек вазифаһын үтәп торҙо. Әбүбәкер әфәнде фәнни хеҙмәтен бынан тамам егерме биш йыл элек, утыҙ биш йәштәрендә, 1891 йылда башланы[1]. Үҙе бик күп ваҡыт ҡаҙаҡ араһында торған һәм ошо юл менән уларҙың тормош һәм көнкүрештәре, тел һәм әҙәбиәттәренең төрлө тарафтарын бик диҡҡәтле өйрәнгән. Тәбиғи этнограф булған Әбүбәкер әфәнде үҙенең ғүмерендә ҡаҙаҡ тормошона, халҡына ҡараған ни генә осратһа ла, ҡалдырмайынса яҙып, теркәп барған. Һуңынан һарттар араһында тороп, уларҙың тормошон да өйрәнгән. Ләкин ҡаҙаҡ тормошо күңелгә ятышлы булғанғамы, йәки ул тормош артығыраҡ оригиналь булғанғамылыр, Әбүбәкер әфәнденең бар хеҙмәте тиерлек ҡаҙаҡ халҡы, ҡаҙаҡ этнографияһына ҡарай. Беҙ үҙебеҙҙең милли ғәҙәт, йола, әҙәбиәтебеҙ менән танышҡыбыҙ килһә, Әбүбәкер әфәнденең әҫәрҙәрен уҡырға һәм уларҙы үҙ халҡыбыҙ ҡуллана алһын өсөн яңыртып ҡуйырға тейешбеҙ. Шуның өсөн мин был урында Әбүбәкер әфәнденең хеҙмәттәрен берәм-берәм һанап күрһәтергә булдым.

Әбүбәкер мырҙа күберәк хеҙмәттәрен Һырдаръя виләйәтенең статистика йыйынтығында ("Сборник материалов для статистики Сырдарьинской области") баҫтырған. Был йыйынтыҡтың беренсе томына "Зиялы хан һәм сәғәт", "Өс ҡәрҙәш", "Зирәк вәзир", "Ихтыярһыҙ Кәмән", "Йылан арбауы", икенсе томына (1892 йыл) "Ҡарт менән уның ун ике йәшлек ҡыҙы", "Ғәжәп һүрәттә ҡотолоу", "Йәш булһа ла, аҡыллы", "Яман ҡыҙ", "Яман малай", "Иҫәр тинтәк", "Йомарт һәм һаран", "Аҡыллы батша", "Хәким батша", "Насар фекерҙәр" исемле хикәйәләр һәм "Бүре менән төлкө", "Төлкө менән әтәс" исемле мәҫәлдәр (басня), "Иҫке заманда ҡолдарҙы азат итеү тураһында бирелгән документтар" тигән әҫәрҙәре ингән.

Өсөнсө томда (1894 йыл) — ”Атҡа менәр”, ”Бер төлкөнөң башынан үткән эштәр”, ”Сысҡан-ҡыҙ”, ”Ерәнсә”, ”Төлкөнөң уңмаған ауы (һунары)”, ”Егетлекле ҡыҙ”, ”Ҡанатлы пәрейҙәрҙең ҡыҙҙары”, ”Төлкө, айыу һәм көтөүсе”, ”Тағай-хандың ҡыҙы нисек оҫта хөкөм сығарған”, ”Өс мәслихәт” тигән хикәйләр, ”Халыҡ араһындағы ырымдар”, ”Мәҡәләләр”.

Дүртенсе томға (1895 йыл) ”Шура (Сура) батыр хикәйәһе”[2], ”Ғәжәп аңсы”, ”Өс ҡатындың үткәне”, ”Өс мөрфәтһеҙ” тигән хикәйәләре, ”Ырымдар”, ”Мәҡәләләр” һәм ”Төлкө, бүре, ҡаплан”, ”Төлкө менән ҡарға”, ”Баҡа менән өйрәктәр”, ”Хәйләкәр төлкө”, ”Батыр ишәк”, ”Төлкө менән ҡаплан, дөйә, дуңғыҙ”, ”Төлкө менән бүҙәнә” тигән мәҫәлдәре (басня), тағы ”Чимкент һарттарының ҡыҙ оҙатыу ғәҙәттәре” тигән әҫәре ингән.

Бишенсе томда (1896 йыл) — ”Ҡаҙығорт кәмәһе хаҡында хикәйә”, ”Мырҙа Иҙеүкәй батыр”, ”Баҡсы (баҡшы)”, ”Албаҫты”, ”Тешләй торған шайтан”, ”Ҡатын ҡиәфәтендәге йылан” тигән хикәйәләр, ”Ырымдар”, ”Һарт мәҡәлдәре”, ”Ғәҙел сара”, ”Ике мәҡәлдең төбө”, ”Үткен ҡыҙ”, ”Тинтәк”, ”Батша, вәзир һәм ҡыҙ”, ”Таҙҙар”, ”Йәнә тинтәк”, ”Лоҡман хәким”, ”Ғәйбәтсе ҡол” тигән хикәйәләр.

Алтынсы томда (1897 йыл) — ”Мәмәктең башынан үткән эштәр”, ”Төлкө менән ташбаҡа һәм урман бете”, ”Кем залимыраҡ?”, ”Ҡарт менән дейеү”, ”Көсе”, ”Ҡыҙ батша” тигән хикәйәләр һәм мәҡәләләр.

Туғыҙынсы томда (1901 йыл) — ”Ҡырғыҙҙарҙың дейеү хаҡындағы хикәйәләре”, ”Ырымдар”, ”Йорт хайуандарын дауалау” тигән әҫәрҙәре (75 бит). Унынсы томға ”Алпамыс батыр” тигән олуғ хикәйә ингән (88 бит). Ун беренсе томда — ”Аҡыллы кәңәштәре”, ”Ҡырғыҙҙарҙың бишек йырҙары”, ун икенсе томда ”Өс таҙҙың ваҡиғаһы” тигән хикәйәләр баҫылған.

Ҡазан университетының археология йәмғиәте йыйынтығының (Известия Общества археологии, истории и этнографии при Казанском университете) ун өсөнсө томында ”Ҡырғыҙҙарҙа ай хисабы һәм уға бәйле ырымдар”, ”Әхмәт Йәсәүиҙең мөһөрө”, ”Әхмәт Йәсәүи мәсетендәге яҙыуҙар” тигән әҫәрҙәре, ун дүртенсе томында ”Ҡырғыҙҙарҙың борон замандағы ерләү (дәфен) ғәҙәттәре”, ”Ҡырғыҙҙар инаныуында ен, дейеү, пәрейҙәрҙең нисек килеп сығыуҙары хаҡында”, ”Йондоҙҙар хаҡында ҡырғыҙҙарҙың хикәйәләре”, ”Ҡырғыҙҙар ҡояшты нисек тасуир итәләр”, ”Ҡырғыҙҙарҙың ҡарыһүҙҙәренән өлгөләр”, ”Ҡырғыҙҙарҙың үлгән кешегә ҡарап уҡый торған һүҙҙәре” тигән мәҡәләләре баҫылған.

Ун бишенсе томда (1899 йыл) — ”Баҡсының табип һәм сихырсылыҡта күрһәткән эштәре” тигән ҙур тикшеренеүе, егерменсе томда (1908 йыл) ”Ғуж бин Малик хаҡында ҡырғыҙ хикәйәләре” тигән мәҡәләһе нәшер ителде[3].

Ҡазан университетының ғилми йыйынтығының (Ученые записки Казанского университета) 1897 йылғы нөсхәләрендә ”Ҡырғыҙҙарҙың ҡарыһүҙҙәренән өлгөләр — Бекет батыр хаҡында ҡырғыҙ хикәйәләре” (72 бит), 1900 йылғы апрель китабында ”Һырдаръя вилайәте ҡырғыҙҙарының туй йолалары хаҡында” тигәндәре донъя күрҙе.

Петербургта Император археология йәмғиәтенең шәреҡ бүлеге йыйынтығының (Записки Восточного Отделения Императорского Русско-

го Археологического общества) унынсы томында ”Ҡорҡот-ата хаҡында бер нисә һүҙ”, ун беренсе томында ”Сыңғыҙ-хан хаҡында ҡырғыҙ хикәйәһе”, ”Аланғсар-әлиф тураһында хикәйә” тигәндәре баҫылды. Император география йәмғиәтенең этнография бүлеге (Записки Императорского Русского Географического общества по отделению этнографии) Потанин шәрәфенә сығарған 34 томында ”Ҡырғыҙҙарҙың юлға сыҡҡанда юрай торған билгеләре” тигән мәҡәләһе урын алған.

Шул уҡ география йәмғиәтенең Төркөстан бүлеге йыйынтығының (Известия Туркестанского Отделения Русского Географического общества) 1900 йылда сыҡҡан томында ”Ҡырғыҙҙарҙың бишек йырҙары”, шунда уҡ, ләкин майҙанға сығарылмайынса ҡалдырылған ”Ҡырғыҙҙарҙың оятһыҙ мәҡәлдәре” тигәне баҫылды.

1899 йылда Ташкентта сыҡҡан ”Русский Туркестан” йыйынтығында ”Ҡырғыҙҙарҙа ауыл көнкүреше терминдары” тигән әҫәре.

Мәскәү этнография йәмғиәте йыйынтығының ”Этнографические обозрения” томдарында (52, 60, 67, 69, 83) ”Һырдаръя виләйәте ҡырғыҙҙарының хикәйәләре” исемендә мәҡәләләр баҫтырҙы. Быларҙан тыш, Диваевтың иң күп әҫәрҙәре Ташкентта сыҡҡан ”Окраина” гәзите менән бер көндә сыҡҡан ”Туркестанские ведомости” рус гәзитендә баҫылған. ”Окраина”ның 1894 йылғы 18-се һанында ”Әйт, ала ҡаҙ”, 52-се, 55-се һандарында ”Ала сапан” тигән ҡырғыҙ хикәйәләре, 66-сы һанында ”Ҡырғыҙҙарҙың тормоштары хаҡында” тигән мәҡәләләре; 1897 йылғы 27-се һанында ”Үләң”, ”Ҡырғыҙҙарҙа хөкөм мәсьәләһе”, 34-се һанында ”Ҡырғыҙҙарҙа хикмәтле һүҙҙәр (афоризмдар)” тигән мәҡәләләре баҫылды.

”Туркестанские ведомости” гәзитенә яҙғандары ла бик күп: 1892 йылғы 41-се һанында ”Елде саҡырып арбау”, 1893 йылғы 7-се һанында ”Йылан саҡҡанға ҡаршы арбау”, 1896 йылғы 83-сө һанында ”Йәнә арбау”, 1900 йылғы 88-се һанында ”Ҡара-ҡырғыҙҙарҙың асылы хаҡында хикәйә”, 91-селә ”Ташкент ҡалаһының төҙөлөүе хаҡында хикәйә”, 97-селә ”Үзбәктәрҙең асылы хаҡында хикәйә”, 1901 йылғы 39-сы, 41-селә ”Аҡһаҡ Тимерҙең Әхмәт Йәсәүи ҡәберенә биргән ярлығы”, 33-сөлә ”Ташкент һарттарының кәсеп һәм һөнәрҙәре”, 25-селә ”Ҡырғыҙҙарҙың инаныуҙары”, 20—25-селәрҙә ”Исмәғил-ата хаҡында хикәйәләр”, 86-сыла бер китапҡа тәнҡит, 1902 йылғы 80-селә һәм 1903 йылғы 43-сөлә ”Ҡырғыҙҙарҙа ауырыу һәм дауалау”, 1903 йылғы 190-сыла ”Ҡатынға ышанма”, 10-сыла ”Алдар Көсә шайтанды нисек алдаған”, 1904 йылғы 102-селә һәм 1905 йылғы 4-селә ”Ҡырғыҙҙарҙың мал тәрбиәһе хаҡында”, 50-селә ”Ҡаҙ батша һәм Ҡарағол”, 1905 йылғы 152-селә ”Ҡырғыҙ балаларының уйындары”, 1909 йылғы 24-селә ”Дүрт ғасыр”, 59-сыла ”Бәҙәк йыры менән ауырыуҙарҙы дауалау”, 114-селә ”Ҡырғыҙ мәҡәлдәре”, 1907 йылғы 54-селә ”Ҡырғыҙ егеттәренең боронғо уйындары” тигән мәҡәләләре баҫылды. Быларҙан тыш, Төркөстан тарих йәмғиәте йыйынтығына (Протоколы Туркестанского кружка любителей археологии) ингән бәғзе мәҡәләләре бар ине. Унда тик ”Күк кәшәнә” тураһында яҙғаны хәтеремдә. Бынан башҡалары башҡа йыйынтыҡта йә гәзиттә яҙылып, ҡалған әҫәрҙәре минең тарафымдан теркәлмәгән.

Ошо килтергәндәребеҙҙән үк асыҡ күренергә тейешле ки, Әбүбәкер әфәнденең хеҙмәттәре ҡаҙаҡ этнографияһының һәр яғын да яҡтырта. Ул унда ҡырғыҙ (йәғни ҡаҙаҡ) халҡының сикһеҙ хикәйәләр, былиналар, мәҫәлдәр (баснялар), мәҡәл, йомаҡ, афоризм, арбау, ырым-юрау, ғөрөф-ғәҙәт һәм йырҙарға ҡараған әҙәбиәт (мәҫәлән, туй, йыназа, бишек йырҙары), үләң, хөрәфәт, баҡсылыҡ кеүек эштәрен, уларҙың үҙ тарихтарын һәм диндәрен, донъялағы төрлө күренештәрен, ҡараштарын, егеттәренең һәм балаларының уйындарын, уларҙа ауыл көнкүрешенә ҡараған терминдарҙы, ғөмүмән, ҡаҙаҡ халҡының этнографияһы исеме менән ни булырға мөмкин, шуларҙың барыһын да йыйған. Етмәһә, бер аҙ һарттарҙыҡын да күрһәткән. Быларҙан тыш, археология һәм тарихҡа ҡараған байтаҡ мәғлүмәт биргән.

Әбүбәкер әфәнденең элекке хеҙмәттәрендә бер тулмаған ер итеп һанарлыҡ урын булһа ла, ул да килтерелгән шул ҡәҙәр ҙур материалдарҙың тик рус телендәге тәржемә хәлендә генә ҡалыуы, янына төрки тексы ҡушылмауылыр. Ләкин бында ғәйеп Әбүбәкер әфәнделә түгел, уның әҫәрҙәрен нәшер иткән йыйынтыҡтың эйәләрендәлер. Йыйынтыҡ эйәләре китаптарында "кәрәкһеҙ" булған төрки текстарға урын бирмәй. Тик һуңғы заманда "Бишек йырҙары", "Бекет батыр", баҡсы, туй йырҙары, "Алпамыш батыр" кеүектәр генә текстары менән нәшер ителгән. Әҫәрҙәрҙең русса тәржемәләре бик һәйбәт, Әбүбәкер әфәнде уларҙың рухын тамам белеп, кәрәк еренән тотоп бирә ала, хатта күп ваҡыт ҡаҙаҡ йырҙарын руссаға ла рифма менән тәржемә итә. Беҙ уйлайбыҙ, Әбүбәкер әфәнде, бәлки, бер ваҡыт үҙе нәшер иткән әҫәрҙәренең асыл текстарын майҙанға сығара алмаҫ микән, тип. Рус фәнни матбуғатында, бер мәртәбә әйтеп үтелгән һүҙгә ҡарағанда, Әбүбәкер әфәнде йыйған материал күберәк уҡыу-яҙыу белә торған Һырдаръя ҡаҙаҡтары араһында йыйылған, һәм байтаҡ өлөшө ауыҙҙан яҙылып алынған булмайынса, ҡағыҙҙан күсерелгән әйберҙәр икән[4]. Был ваҡытта асыл текстарын булдырыу мәсьәләһе тағы кәрәклерәк булып төшә. Беҙҙең яҙыуыбыҙса, Әбүбәкер әфәнделә йыйылған материал бик күп. Шуларҙың тәржемәләре нәшер ителгәнен дә, ителмәгәнен дә был хөрмәтле зат йыйып бирә алһа, бөтөнөһөн йыйып баҫтырырға, иншалла, беҙҙә бер һиммәт әһле табылыр ине. Әбүбәкер әфәнде йыйған нәмәләр телебеҙ һәм халҡыбыҙ өсөн баһалап бөткөһөҙ бер хазиналыр. Әгәр асыл төрки телендә лә сығып ҡуйһа, ул ваҡыт уның милли тормошобоҙ өсөн булған ҡәҙәре ҡиммәте тағы артыр ине. Әгәр бер кеше үҙебеҙҙең саф ҡәүми хаятыбыҙ эсенә сумайым тиһә, ул ваҡыт уға, шул Радлов, Потаниндың ҡәүми үҙенсәлегебеҙҙе бер ҙә боҙмай һаҡлап килгән төрктәр араһынан йыйған төрки этнографияһы эсенә инергә кәрәк. Яңы Ҡазан татар әҙәбиәте ҡазан татары йәһәтендәге йәмһеҙ ерҙәренән инә алған ҡәҙәр индек. Инде шул халыҡ өсөн "халыҡтыҡы" булған яңы бер "ҡәүми" нәмә бирәм тиһә, мотлаҡ шул Диваевтың хеҙмәттәренә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Әгәр "Аҡ юл" журналы балаларыбыҙҙы үҙебеҙҙең ҡәүми бишегебеҙҙә халҡыбыҙҙың рухы эсендә тәрбиәләргә теләһә, үҙенең матур биттәренә теҙә торған материалды мотлаҡ шул Диваевтар йыйған йәки

йыя торған өлкәнән алырға кәрәк булыр. Сөнки беҙҙең халыҡтың саф ҡәүми тормошо һарттың Әбү Мөслим уҡып ултыра торған сәйханаларында, ҡазан татарының ҡаптырмалар тултырып арҡаһына аҫҡан ҡырҡтартмаһында түгел, бәлки ҡәүми үҙенсәлеккә бай, һүҙгә оҫта, ғәҙәт, йолалары беҙҙең бик боронғо тарихыбыҙ менән бергә тыуған ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ халыҡтары араһындалыр. Ислам мәҙәниәте дин, исламды ныығыраҡ тотҡан ҡазан татары менән һарттың милли, ҡәүми үҙенсәлектәрен шул ҡәҙәр ныҡ йолҡколаған ки, улар ҡәүми йәһәттән бөтөнләй төҫһөҙ, ҡиәфәтһеҙ ҡалғандар, уларҙы ғәҙәт һәм әхлаҡтары йәһәтенән Иран һәм Һиндостан, Ғәрәбстан мосолмандарынан айырыуы ла ҡыйын. Хеҙмәтенә егерме биш йыл ваҡыт тулғанда беҙҙең Өфөлө башҡорт мырҙаһы Әбүбәкер әфәнде ошо ҡәүмиәт донъяһы эсендә ҡайнап йөрөгән, ул беҙҙең халыҡтың рухын, йәнен ап-асыҡ күреп белә. Ул үҙ халҡын, ҡәүемен һөйә, уның яҡшы яҡтарын белеп, ҡулы менән тотоп ҡарап һөйә. Беҙ өмөт итәбеҙ ки, был оло этнографыбыҙ әле бынан һуң оҙон ғүмер һөрөр һәм уны халҡы ла танып белер, ул үҙе лә һөйөклө халҡының яңы майҙанға сығып килгән һәм мөхтәрәм ҡартты бик ҡыҙыҡһындыра торған әҙәбиәтендә милли ҡәләменең эҙен ҡалдырыр.

*Стәрлетамаҡ өйәҙе Көҙән ауылы, 8 май, 1915 йыл.*

# Диваев юбилейы рус йәмғиәтендә

Әбүбәкер әфәнде юбилейы рус йәмғиәтендә бик матур төҫ алды. Төркөстан гәзиттәрендә ("Туркестанские ведомости", № 249 һәм "Туркестанский курьер", № 248) Әбүбәкер әфәнденең хеҙмәттәре хаҡында ҙур-ҙур мәҡәләләр баҫылды. "Туркестанские ведомости"ҙа З.К.Тимашев: "...Төркөстан хаҡындағы рус әҙәбиәтен тәфтиш итеп яҙған кешеләрҙең һәммәһе лә уның "Иҙеүкәй бәк", "Сура батыр" кеүек былиналар һәм башҡа ҡырғыҙ (элек ҡаҙаҡтарҙы ҡырғыҙ тип атағандар) хикәйә һәм риүәйәттәре ниндәй матур, ниндәй тәмле телдә рус фәнни әҙәбиәтенә һалып биргәнен белә. Һәммә кешеләр был заттың ҡәләменән сыҡҡан ошо матур әҫәрҙәрҙән ижади илһам алдылар.

Әбүбәкер әфәнде Төркөстанға 1876 йылда килде. Ун йыл буйы бындағы ғәскәри хеҙмәттәр менән шөғөлләнеп йөрөнө. Һуңынан был яҡтарҙа тыныслыҡ урынлашҡас, ул 1886 йылдан башлап фән һәм әҙәбиәткә йәбеште. Бөгөн ун томға (1600 биткә) барып еткән әҫәрҙәрендә ул үҙ эсендә тороп белгән ҡырғыҙҙың бишегенән алып ҡәберенә саҡлы булған тормошон, былина, поэма, хикәйә, мәҫәл, ендәр хаҡындағы

хикәйәләр, риүәйәттәр, мәҡәлдәр, таҡмаҡтар, йомаҡтар, бишек йырҙары, туй йолаһы, үләңдәр, бала, егет һәм ҡыҙҙарҙың уйындары, инаныу, арбау, төш юрау, тәжрибәләр, баҡсылыҡ ғәҙәттәрен, ғөмүмән, был тормоштоң һәммә яҡтарын энәһенән ебенә саҡлы асып бирҙе. Уларҙы мөһабәт, үҙенә генә хас бер тырышлыҡ менән йыйып, тәртипкә ҡуйҙы. Телгә алынған нәмәләрҙең һәммәһен шәрҡи рух, шәреҡкә хас гүзәллеге менән матур русса текстарҙа тасуир итеп бирҙе", — тип яҙа.

Хеҙмәттәрҙең ҡиммәтен тағы асығыраҡ күрер өсөн уйлап ҡарайыҡ. Бына, мәҫәлән, этнография әйберҙәре көндән-көн юғалып бөтөп бара. Уларҙың ҙур өлөшөн Әбүбәкер әфәнде генә һаҡлап ҡалды. Уның был хеҙмәте этнография өсөн, ватаныбыҙҙың фәне өсөн мәңгелек әйберҙәр. Ул үҙенең бик күп йылдар буйына килгән ҙур хеҙмәте өсөн төрлө ғилми ҡоролоштар, ғилемдә һөйгән олуғ заттар тарафынан маҡталып һәм юғары баһаланып килде. 1905 йылда генерал-губернатор Гродеков уға яҙған хатында: "Һеҙ үҙегеҙҙең әҫәрҙәрегеҙҙе биреп, миңә оло байрам яһанығыҙ. Һеҙҙә ниндәй ҙур көс-ғәйрәт бар. Һеҙ был ҡиммәтле хеҙмәттәрегеҙҙе дауам итерһегеҙ, үҙегеҙгә фән ғәләмендә ҙур бер эҙ ҡалдырырһығыҙ. Мин хәҙерҙән үк Һеҙгә фән тарафынан рәхмәттәр әйтәм.

Мин Һеҙҙең хеҙмәттәрегеҙҙе яҙып маҡтар өсөн һүҙ таба алмайым. Тик шуны ғына әйтәм: Һеҙ ғилем хазинаһына ҙур нәмә һалдығыҙ. Йәшәгеҙ, хөрмәтле ғалим, хөрмәтле юбиляр". "Туркестанский курьер"ҙа ла шундай мәҡәлә яҙылған. Һәр ике гәзит Әбүбәкер әфәнденең бөтә әҫәрҙәрен берәмләп һанап күрһәткән.

Әбүбәкер әфәнде 21 ноябрҙә миңә яҙған хатында: "11 ноябрҙә Төркөстан археология йәмғиәтенең ғөмүми мәжлесе булды. Бында минең хеҙмәттәремде һөйләнеләр. Николай Петрович Остроумов хеҙмәттәрем хаҡында күңелгә ятышлы һүҙҙәр менән бер телмәр һөйләне. Халыҡ ҡул сапты һәм мине тәбрик итте. Ҙур түрәләр, хөрмәтле ханымдар бар ине. Ни эшләргә лә белмәнем, ҡайҙа инергә лә белмәнем", — ти.

Мәскәү һәм Петроград этнография йәмғиәттәрендә лә шундай саралар үткәрелгән булһа кәрәк. Ләкин хәбәре әлегә килгәне юҡ.

*"Тормош" гәзите, 1915, № 268.*

[1] Гродековтың "Ҡырғыҙҙар һәм ҡара-ҡырғыҙҙар" тигән китабында мәҡәлә, йомаҡтар өлөшө Әбүбәкер әфәнде тарафынан төҙөлгән. Ләкин унда Диваев исеме телгә алынмағанға күрә, беҙ уны һанаманыҡ.

[2] Был хикәйә Диваев әфәнде рәүеше башҡа ривайәттәр (варианттар) араһында иң байылыр. Диваев әфәнде был хеҙмәтен йәнә икенсе мәртәбә "Урта Азия альманахы"нда ла баҫтырҙы.

[3] Диваевтың был хеҙмәтенә өҫтәмә Ҡазан университеты профессоры Андерсон телгә алынған йыйынтыҡтың шул уҡ томында Диваев мәҡәләһенә ҡушымта итеп бер әҫәр яҙҙы. Минең белеүемсә, Ғуж бин Малик ҡиссаһы иң яҡшы тикшеренеү булһа кәрәк.

[4] "Живая Старина", за 1909 год, отдел критики и библиографии.